# Ынйылар

*Пиши о том к чему лежит душа...*
*Акмулла*

**Бәләбәй ҡалаһы Башҡорт гимназия – интернаты гәзите № 7 (114). май 2019 йыл**

## Еңеүселәр йөрәгендә йәшәү уты һүнмәһен!

**Хөрмәтле ветерандар, уҡытыусылар, тәрбиәселәр, ата-әсәләр, ҡәҙерле гимназия-интернаты уҡыусылары!**




***Һеҙҙе яҡынлашып килгән Бөйөк Еңеү көнө менән ысын күңелдән ҡайнар ҡотлайым!***

***Барығыҙға ла ныҡлы сәләмәтлек, аҡ бәхеттәр, бай, яҡты көндәр, илебеҙҙең тыныслығын теләйем. Бәхет ҡояшының сағыу нурҙарына йылынып, тормошҡа һөйөнөп, донъя ҡыуаныстарын татып, бәрәкәтле, мул тормошта тигеҙ-тигеҙ ғүмер итергә яҙһын һеҙгә. Йөҙөгөҙҙө һәр саҡ шат йылмайыу биҙәһен, күңелегеҙҙе балаларығыҙҙың һәм яҡындарығыҙҙың ихлас һөйөүе, ихтирамы яҡтыртһын. Гел уңыштар именлек һәм изгелектәр генә юлдаш булһындар.***

***БГИ директоры Д.Ғ. Фәтхетдинова***

### *Батырҙар даны мәңгелек*

Сабыйҙың балалығын урлап,
Йәш ҡыҙҙарҙың өмөттәрен емереп,
Егетәрҙең хыялдарын ватып,
Фашист-ҡоҙғон ябырылған илемә.

Бөтә халыҡ берҙәм булып
Күтәрелгән был яуға.
Ғүмерҙәрен аямайса
Киткән илде һаҡларға.
Тыуған илде яҡларға.

Һуғыш тиҙ бөтөрҙәй булған…
Халыҡ яңылыш уйлаған.
«Көтөгеҙ, тиҙ ҡайтырбыҙ,» - тип,
Ир-егеттәр хушлашҡан.

Бөтә халыҡ берҙәм булып
Күтәрелгән был яуға.
Ғүмерҙәрен аямайса
Киткән илде һаҡларға,
Тыуған илде яҡларға.



Әбей-һәбей, йәш-елкенсәк
Һәр көн эштә булғандар.
Эш ҡоралдары уларҙың
Фашистарҙы еңеү өсөн,
Изге ҡорал булғандыр?

Илебеҙҙе аждаһалай
Быуып алырға теләп,
Ташланһа ла яуыз фашист
Үтәлмәне ул теләк.



Тыуған халҡым батырҙарса,
Берҙәм, ҡыйыу көрәште…
Һәм ниһайәт еңеп сыҡты
Был аяуһыҙ көрәште.

Бөйөк Еңеү килде ергә,
Бөтә халыҡ шатланды.
Был көн мәңге изге беҙгә,
Мәңге йәшәр ил даны!

Эй, кешеләр, һеҙгә өндәшәм:
Онотмағыҙ ул саҡтарҙы.
Беҙгә оло бәхет биргән,
Ҡурҡыу белмәҫ һалдаттарҙы!
Мәңге батыр һалдаттарҙы!

***Изиәтуллина Сулпан,***
***6-сы б класы уҡыусыһы.***

### *Еңеү көнө*

Күҙ алдында матур, айлы бер кис,
Тын тауыштар ишетелмәй һис.
Бар донъя тынып ҡалған,
Халыҡ йоҡоға талған.

Бер мәлдә йондоҙҙар ямғырындай,
Ҡышҡы һалҡын бер бурандай,
Бомбалар күктән яуа,
Бар ерҙә туҙан туҙа.

Ҡот-осҡос мәлдәре,
Ҡыҫҡара кешеләр ғүмере,
Аслыҡтан үлә балалар,
Илде һаҡлаған батырҙар.

Былдай фажиғәле төндәр, көндәр,
Кешеләрҙә төрлө уйҙар …
Мең туғыҙ йөҙ ҡырҡ биш!
Онотолмаҫ был һан һис.
Күк йөҙө зәңгәр һыулы,
Был “Еңеү көнө” булды.

***Миһранова Юлиә,***
***6-сы б класы уҡыусыһы.***



# Азатлыкты яулап ятып ҡалған Атай - олатайҙар гел иҫтә




Был – окоп түгел, крепость,
Был - минең Ватан,
Был – минең быуын
Намыҫ, иркем, дан!
Был окоп – атайымдың өйө
Мин үҫкән урам,
Был окоп – еңеү усағы –
Мәскәү һәм Урал.
(М. Кәрим).

Кешелек донъяла йәшәй башлағандан бирле ер йөҙөндә бик күп ҡан ҡойош, һуғыштар булып торған. Әлеге ваҡытта ла әленән-әле һуғыштар тоҡанып тора. Һуғыштар бер дәүләт эсендә, төрлө илдәр араһында ла башланып китә.

Һуғышты оноторлоҡ түгел. Һәр бер бындай ҡурҡыныс ваҡиға кешенең йөрәгендә тороп ҡала.

Совет халҡының Бөйөк Ватан һуғышында еңеүенә 74 йыл булды. Әммә был ҡан ҡойғос, үлемселе һуғыштың бөтә ауырлығын күтәргән яугирҙарҙың, тыл эшселәренең, улдарын һәм ирҙәрен ғүмер буйы көтөп ҡартайған әсәләрҙең , хәҙер инде үҙҙәре өләсәй һәм олатай булған һуғыш йылдары балаларының күҙ йәштәре кибеп бөтмәгән. Ярты быуаттан артығыраҡ ваҡыт үтһә лә, 1941 йылдың 22 июнен, Германия фашыстарының илебеҙгә һуғыш асыуын, бер кем дә онотмаҫ. Илебеҙ халҡы, дошманға ҡаршы яуға күтәрелеп, фрнтта һәм тылда тиңһеҙ батырлыҡтар күрһәтте. Фронттағылар һуғыш ауырлыҡтарын үҙ елкәләрендә татынылар, тылдағылар, аслыҡҡа ҡарамаҫтан, Ҡыҙыл Армияны ҡорал, аҙыҡ-түлек, кейем һәм башҡа әйберҙәр менән ярҙам итеү маҡсатында “ Бөтәһе лә - фронт өсөн, бөтәһе лә- дошманды еңеү өсөн!” девизы аҫтында көнө-төнө тир түккәндәр.

Еңеү илебеҙ халҡына бик ҡиммәткә төштө: нисәмә йыл барған ҡот оҫҡос һуғыш күпме емереклек, етемлек, миллионлаған ҡорбан алып килде. Быға ҡарамаҫтан, беҙ үҙебеҙҙең өләсәйҙәребеҙгә һәм олатайҙарыбыҙға рәхмәт белдерергә тейешбеҙ, сөнки улар беҙгә тыныс тормош бүләк иттеләр!

***Нәсертдинова Алһыу, 7-се б класы уҡыусыһы.***

## *Бөйөк еңеү көнө менән!*

Яҙ килде беҙҙең ергә,
Тәбиғәт тә уянды.
Сылтыр – сылтыр шатланышып
Күләүектәр ҙә аҡты.
Тыуған яҡтарын һағынып
Йыраҡтан ҡоштар ҡайтты.
Ялан тулып умырзая
Ерҙән башын ҡалҡытты.
Шундай матур яҙ көнөндә
9 Май етте.
Был көндө бөтә олатай
Ҡотлау һүҙен ишеттеләр.
Миҙалдарын түшкә тағып
Байрамға ашыҡтылар.
Шундай изге кешеләрҙе
Онотмабыҙ һис берҙә!

***Сәфиуллина Миләүшә, 2-се а класы уҡыусыһы.***

## *9 май*

**Оҙатып вокзалдар ҡаршында,**
**Маңлайҙан үптеләр әсәләр…**

1941 йылдың 22 июнендә фашист ил-баҫарҙары беҙҙең илебеҙгә ябырылды. Бөтә ил халҡы берҙәм булып изге яуга күтәрелде. Һуғышта ирҙәр дошманды ҡыйратһа, тылда ҡатын-ҡыҙҙар, бала-саға ал-ял белмәй эшләне, дошманга ҡаршы көрәшергә кәрәкле бөтә нәмәне етештерҙе. Бик күп юғалтыуҙар алып килде һуғыш. Күпме етем балалар ҡалды, күпме ир-егеттәребеҙ яуҙа баштарын һалды. Ләкин халҡыбыҙ бөйөк еңеүгә - яуыз дошманды еңеүгә ышанысын юғалтманы. Һәм бына зур ауырлыҡтар менән көткән көн – Бөйөк Еңеү көнө килде. Беҙ һәр йыл был байрамды шатланышып көтөп алабыҙ. Бөтә олатай, өләсәйҙәребеҙҙе ҡотлап, бүләктәр тапшырабыҙ.

Беҙ бер ҡасанда был зур байрамды онотмаҫбыҙ!

***Файзуллин Флүр, 7-се б класы уҡыусыһы.***

# Ҡурҡыныс һуғыш йылдары!

## Еңеү көнө

Ҡояш нурҙары төштө,
Йылыраҡ булып китте.
Шуның өсөн иртә торҙом,
Урамға мин күҙ һалдым.

Бөтә халыҡ шау-гөр килә
Нимә булды һуң бөгөн?
Урам буйлап парад килә
Ниндәй хәлдәр һуң бөгөн?

Әсәйем янына сыҡтым,
Тәмлекәстәр бешергән.
Көндәлеккә ҡарағайным
Еңеү көнө бит еткән!

Әсәйем миңә әйтте:
“Хәйерле иртә, ҡыҙым.
Хәҙер олатайың килә
Әҙерләнә тор, ҡыҙым”.

Мин тиҙ генә йыуындым,
Матур итеп кейендем.
Баҡсалағы сәскәләрҙен
Төрләһен йыйып керҙем.

Күп тә ваҡыт үтмәне
Олатай килеп етте.
Сәскәләрҙе тапшырҙым,
Байрам менән ҡотланым.

Тәмле итеп сәй эстек,
Рәхәтләнеп һөйләштек.
Еңеү көнөн шулай итеп
Бергәләшеп үткәрҙек.
Һәм байрамға йүнәлдек.

***Шәрифуллина Альбина,***
***8-се б класы уҡыусыһы.***

## Икмәк ҡәҙерен беләйек!

Китеп барам урам буйлап
Күрәм икмәк ятҡанын.
Туктап ҡалдым, уйға баттым,
Алдым икмәк киҫәген.

Хәҙер генә ҡәҙер юҡ ул
Икмәктең валсығына,
Һуғыш йылдарын алайыҡ
Ас ултырған һәр ғаилә.

Һалдаттар көслө булһын тип,
Һәр ғаилә ярҙам иткән.
Үҙенең һуңғы ризығын
Улар фронтҡа ебәргән.

Күпме әсә, күпме бала
Ҡайғырышып илашҡан.
Өсмөйөшлө хаттар алып
Ҡайтырына ышанған.

Мәктәптәрен тамамламай
Теләк менән егеттәр,
Ғүмерҙәре өсөн ҡурҡмай,
Шулай фронтҡа киткәндәр.

Бөйөк Ватан һуғышы!
Әйтергә лә ҡурҡыныс.
Беҙҙең олатайҙарға
Булған оло ышаныс!

***Шәрифуллина Альбина,***
***8-се б класы уҡыусыһы.***



## Ҡурҡыныс килде беҙгә

Мең туғыҙ йөҙ ҡырҡ берҙең
Йәйҙең эҫе көнөндә,
Ҡара болот яуып китте,
Ҡурҡыныс килде беҙгә.

Бөтә ил ағайҙарын,
Ҡыйыу йәш малайҙарын,
Һуғышҡа оҙаттылар,
Ҡатындар илаштылар

Шул көндән башлап илдә
Ауыр көндәр ҙә етте.
Аслыҡтан, эш күплектән,
Һәр ғаилә ҡайғы күрҙе.

Һалдаттар бар көсөн биреп,
Тыуған ерҙе һаҡланы.
Фашистарҙың ҡулдарына
Илебеҙҙе һатманы.

Фашистарҙың теләктәрен
Яндырып көл иттегеҙ.
Һәр бер кеше күңеленә
Зур ышаныс керттегеҙ.

***Вәлиәхмәтова Динара,***
***8-се б класы уҡыусыһы.***

## Рәхмәт һеҙгә!

Тыныслыҡ өсөн зур рәхмәт!
Рәхмәт аяҙ күк өсөн!
Күнел түрендә һеҙ генә,
Онотмабыҙ мәңгегә.

Шундай һуҙҙәр менән
Баш эйәбеҙ беҙ һеҙгә.
Еңеү алып килгән өсөн
Рәхмәт һәр берегеҙгә!

Ғорурланабыҙ һеҙҙең менән,
Һәм ант итәбеҙ һеҙгә.
Рәсәйҙе, Башҡортостанды
Һаҡлап ҡалырбыҙ бергә!

***Вәлиәхмәтова Динара,***
***8-се б класы уҡыусыһы.***

## Память сердца

Мерилом всего человеческого на земле является Совесть. И люди есть такие – с чистой совестью.Солдаты-фронтовики… Победители… Живые и мёртвые.



Жил такой Человек – мой дедушка, дедуля, **Ихсанов Шайбак Миннихакович** – нравственная опора нашего рода, настоящий мужчина, человек большой души и воин, за плечами которого Победа.

В деревне Туктагулово Туймазинского района 14 декабря 1925 года родился мальчик, еще не знающий, что в золотую пору 18-летия его постигнет война. Он жил, как все, - окончил 6 классов, работал в колхозе, а в январе 1943 добровольцем ушел на фронт. Рассматривая военные архивы, ужасаешься от мысли, как играла человеческой жизнью война: Белорусский фронт, 2-й Прибалтийский, 1-й Украинский, Польша, Чехия, Германия, Австрия.

Дедуля не любил об этом рассказывать. Можно только догадываться, почему… Да и зачем говорить о пережитых ужасах нам, тогда еще маленьким внукам, имеющим представление о войне только из школьных учебников и художественной литературы. И только сейчас мне больно оттого, что мы так мало знаем о героическом прошлом нашего дедушки. Каждый год 9 мая к дедуле приходили его друзья-фронтовики, после Парада они сидели задумавшись… А потом начинался разговор по душам, неторопливый, негромкий, недоступный непосвященным.

Лишь немногие подслушанные истории трепетно передаются из уст в уста. С провизией бывало по-разному: застрянет где-нибудь полевая кухня, и ждут солдаты по несколько дней голодные. А бывало, что и вся еда – капуста на воде или суп из крапивы. Но вот если каша пшенная, на воде варенная, горячая, густая, аж ложка в ней стоит – тогда и воевать легче, тогда и праздник. Вот в один из таких дней отправляют радиотелеграфиста Ихсанова связь налаживать, искать обрыв провода неизвестно где, а тут – время обеда: запах каши пшенной, дымящейся, на десятки метров вокруг расходится… Приказ, срочно бежать надо. Что делать? Отрезал кашевар кусок каши и сунул солдату прямо в карман! Вот так и легче – каша пшенная не только бок, но и душу греет. Дедуля, сколько помню, всегда приговаривал, что ничего нет вкуснее пшенной каши, на воде варенной.

В сентябре-октябре 1944 г. войска 4-го Украинского фронта во взаимодействии с 1-м Украинским фронтом участвовали в Восточно-Карпатской стратегической операции, в ходе которой была освобождена Закарпатская Закарпатская Украина и часть территории



Чехословакии. Рядовой телеграфист-красноармеец 273 стрелковой Бежицкой дивизии Ихсанов Шайбак переплыл реку Днепр во время артобстрела, чтобы восстановить связь на другом берегу. 1 октября 1944 года награжден Орденом Красной Звезды.

В поэме А.Т.Твардовского «Василий Теркин» есть строчки, читая которые, я узнаю своего деда в образе народного героя:

Вслед за ротой на опушку
Теркин движется с катушкой.
Разворачивает снасть, -
Приказали делать связь.

И, у заберегов корку
Ледяную обломав,
Он как он, Василий Теркин,
Встал живой,- добрался вплавь.

Нет ничего странного в этом совпадении. Но все же закрадывается тщеславная мысль, что о моем деде написал знаменитый поэт.

Потом был прорыв обороны немцев на западном берегу реки Одер 11 февраля и овладение городом-крепостью Бреславль 7 мая 1945 года. Кажется, вот она – долгожданная Победа, возвращение домой. Поцеловать родную землю ефрейтор Ихсанов Шайбак смог лишь в апреле 1949 года. До момента демобилизации служил радиоспециалистом пеленгаторных постов при Разведуправлении штаба ЦГВ частей «ОСНАЗ». На них возлагались задачи разведки эфира, осуществления радиоперехвата, ведения шифрованной радиопереписки Морзе, предварительной обработки и анализа данных с радиосетей и отдельных радиоточек.

Об этом дедуля никогда не рассказывал, вернее, не смел. Лишь сопоставив данные военного билета и информацию социальной сети, можно сделать некоторые выводы - остальное так и останется за завесой тайны.

Впрочем, как и многое другое… 18 октября 2002 года дедули не стало. Он никогда не жаловался ни на судьбу, ни на здоровье: делал зарядку по утрам, отжимался в 76 лет, ухаживал за огородом, говорил, что нужно много двигаться. Поэтому и остался в нашей памяти энергичным, подтянутым, неунывающим.



Когда близкие уходят, часто вспоминаются их главные наставления. Дедуля часто повторял мне «акыллы бул» (умной будь, рассудительной, мудрой), а что значит мудрой – спросить теперь не у кого…

Имя моего любимого деда значится в юбилейных изданиях «На алтарь Победы. Ратный подвиг белебеевцев», «Башкирских нефтяников славные имена», но в них так мало о нем сказано. Заслуживает мой дедуля, чтобы о его подвиге знали и чтили светлую память.

***Внучка Регина (Мухаметзянова Р.А., учитель русского языка и литературы)***






### *Ҙур байрам!*

Илдә еңеү, ҙур байрам.
Бөтә халыҡ шатлана.
Ҡулдарына сәскә тотҡан
Атай, әсәй һәм бала.
***Миһранова Лилиә,***
***3-сө г класы уҡыусыһы.***



### *Атайым*

Атайымды яратам,
Уға хөрмәт, уға дан.
Һинең ҡыйыу икәнеңде.
Белдем бит мин аҙаҡтан.

Донъяға килгәс тә мин.
Һинең менән, атай, бергә
Иң күңелле мәлдәрем.
Һине маҡтай телдәрем.

Атайым донъя тотҡаһы.
Беҙҙең иң ҡәҙерлебеҙ.
Яратабыҙ, хөрмәтләйбеҙ
Һин бик кәрәк кешебеҙ.
***Вәлиәхмәтова Динара,***
***8-се б класы уҡыусыһы.***



### *Минең атайым*

Минең атай бик уңған.
Күпте күргән, күп белгән,
Һис тә ҡурҡып ҡалмаған.
Сит илдә лә ул булған.

Тыуған илде һаҡлаған.
Беҙҙең иң ҡәҙерлебеҙ,
Яратам мин бик һине,
Онота күрмә мине.
***Йосопова Радмила,***
***6-сы б класы уҡыусыһы.***

«Ыһйылар»
Учредитель-Администрация МАОУ Башкирская гимназия-интернат г. Белебея РБ
Выходит с 1 сентября 2005

Главный редактор З.Х.Исламова
Ответственная за выпуск З.Х. Исламова .
Верстка З.Х. Исламова
Редакция может не разделять мнение авторов статей.

Адрес редакции: 452000, РФ РБ, г. Белебей,
ул. Морозова, 2, каб. №36
Телефон: 5-31-43
Email: Bel_bg@mail.ru
www.Bel-bgi.ucoz.ru

Газета выходит один раз в месяц в редакции МАОУ Башкирская гимназия-интернат г. Белебея РБ
Распространяется бесплатно.
Тираж 60 экз. 07. 05. 2019 г.
9. 00 ч.